Муниципальное автономное общеобразовательное учреждение
«Средняя общеобразовательная школа №30»
городского округа город Стерлитамак Республики Башкортостан

| Рассмотрено<br>на заседании ШМО учителей<br>родных языков<br>Протокол № 4<br>от « 28 »  августа 2023г.<br>Руководитель МО<br>Г.М.Фахретдинова | Согласовано<br>с заместителем директора<br>А.И.Емельяновой<br>«29»августа 2023г. | Утверждено<br>директором<br>МАОУ «СОШ№30»<br>О.А.Валикова<br>Приказ № 388<br>от «29 »августа 2023 г. |
|---|---|---|

# Рабочая программа
# по родному (башкирскому) языку
# для 7-9 классов

Составители : учителя башкирского языка:

Абдуллина Л.Р., Багаутдинова Э.М.,Фахретдинова Г.М.

## Аңлатмалы яҙыу

Программа башҡорт телен уҡытыуҙың икенсе баҫҡысы 7-9-сы кластарға тура килә. 7-9-сы кластарҙа уҡытыуҙың маҡсаты – башланғыс кластарҙа алған белем һәм күнекмәләрҙе икенсе баҫҡыс талаптарына ярашлы практик йүнәлештә тәрәнәйтеү, башҡорт теленең өндәр системаһы, лексик байлығы, морфологик категориялары һәм синтаксик төҙөлөшө тураһында белем биреү.

Был эш программаһы түбәндәге хоҡуҡи –норматив документтарға таянып тормошҡа ашырыла:

«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;

Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы 29.12.2012 №273-ФЗ

Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы 01.07.2013 № 696-з;

Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхсән, метапредмет, предмет һөҙөмтәләре. “Башҡорт (туған) тел” предметын өйрәнеү һөҙөмтәләре.

*Шәхси һөҙөмтәләр:*

Башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;

Башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; телмәр үҙ камиллаштырыуға ынтылыу;

Аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәләрен булдырыу.

*Метапредмет һөҙөмтәләре:*

Телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:

*Аудирование һәм уҡыу:*

телдән һәм яҙма хәбәр иткән мәғлүмәтте ( коммуникатив йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;

төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү), төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;

төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итеү; төрлө төрҙәге аудирование менән эш итеү (һайлап алыу, танышыу);

төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлеге ( матбуғат саралары, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт-дискылар, интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон маларҙан һайлап алыу күнекмәләрен булдырыу;

һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү;

стилистик үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткеһен һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;

һөйләү һәм яҙыу;

алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеге, хәрәкәттең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау һәм уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват анығ итеп әйтеү;
тыңланған йә уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;
төрлө стилдә һәм жанрҙа, адреслаyыуға ҡарап һәм аралашыу ситуацияһына ҡарап телдән һәм яҙма текст төҙөй алыу;
телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;
төрлө төрҙәге монологты (хәбәрләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү; төрлө төрҙәге монологтың берләшеүе) һәм диалог (этикеты һүҙ эсенә алған, диалог-һорашыу, диалог-аралашыуға өндәү, диалог-фекер алышыу һ.б. төрлө төрҙәге диалог берләшеүен) үҙләштереү;
ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистик нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау;
телмәр этикет нормаларын һаҡлап, аралаша алыу, телмәр аралашыу прцесында ым-ишара, мимиканы ҡулланыу;
уҡыу прцесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контролдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белеү; грамматик һәм телмәр хаталарын таба һәм уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;
үҙ тиңдәштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад менән сығыш яһау; бәхәстә, төрлө аргументтар ҡулланып, көнүҙәк проблемалар буйынса сығыштарҙа ҡатнашыу;
алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; туған телде башҡа фәндәрҙә белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу;
тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрҙе предмет-ара ҡулланыу;
аралашыу процесында тирә-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә, кәтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу: шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

*Предмет һөҙөмтәләре:*

-телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт телебулыуы тураһында, тел менән халыҡ мәҙәниәттең бәйләнештәре тураһында, кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;

-гуманитар фәндәр системаһында һәм мәғарифта туған телдең урынын, ролен тулыһынса аңлау;

-туған тел тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңлау;

-тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистика һәм уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары, фәнни, публицистик,, рәсми-эшлекле стилдәр, матур әҙәбиәт стиле;функциональ телмәр төрҙәре( хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү); текст, текст төрҙәре; телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләреһәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү;

-башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;

-телдең төп берәмектәрен, грамматик категорияларын анализлау һәм таныу, тел берәмектәрен аралашыу шарттарына ярашлы ҡулланыу;

-һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен (фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), төп билдә һәм структура күҙлегенән сығып, күп аспектлы анализ яһау;

-тел-һүрәтләү саралары һәм уларҙы үҙ телмәрендә ҡулланыу;

-туған телдең эстетик функцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе.**

**7 класс**

**Фонетика ,һүҙьяһалыш .4сәғәт**

**Ҡылым. 19 сәғәт**

Ҡылымдарҙың күләм һәм йүнәлеш категориялары менән практик таныштырыу күнегеүҙәре. Төп йүнәлештән башҡа ҡылым йүнәлештәренең айырым ялғауҙары булыуын күрһәтеү һәм башҡорт телендә биш йүнәлеш: төп йүнәлеш, ҡайтым йүнәлеше, төшөм йүнәлеше, йөкмәтеү йүнәлеше һәм уртаҡлыҡ йүнәлеше барлығын практик миҫалдарҙа күрһәтеү.

Ҡылымдарҙың затлы формаларының үҙенсәлектәрен: һан, зат, заман менән үҙгәрешен асыҡлау, уларҙы рус теленә тәржемә итеү күнегеүҙәрен эшләтеү.

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәләре, заман формалары, һан, зат менән үҙгәреше, ниндәй һөйләм киҫәге була алыуы.

Хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәһе, яһалышы, үҙгәреше.

Ҡылымдарҙың затһыҙ формалары: сифат ҡылым, хәл ҡылым, исем ҡылым, уртаҡ ҡылым. Уларҙың зат, һан менән үҙгәрмәүе.

Исем ҡылымда ҡылымлыҡ билдәләре: барлыҡ - юҡлыҡ, ҡылым күләмдәре һәм йүнәлештәре ялғауҙарын ҡабул итә алыуы.

Исем ҡылымдарҙың исемгә күсеүе. Исем ҡылымдарҙы рус теленә тәржемә итеү.

Уртаҡ ҡылым, уның мәғәнәһе, яһалышы, барлыҡ-юҡлыҡ менән үҙгәреше. Башҡорт телендә уртаҡ ҡылымдарҙың икенсе бер ҡылымдарҙы асыҡлап килеүе ихтимал: *бирешмәҫк этырыша, күрергә теләйһ.б.*

Уртаҡ ҡылымдан һуң *ярай, ярамай, тейеш, тейеш түгел, кәрәк, мөмкин* модальһүҙҙәрекилеп, төрлө модаль мәғәнәләр белдерә алыуын практик күҙәтеү, уларҙы рус теленә тәржемә итеү.

Үткән заман сифат ҡылым, уның яһалышы, барлыҡта, юҡлыкта килә алыуы. Киләсәк заман сифат ҡылым, уның яһалышы, төрҙәре, мәғәнәләре.

Хәл ҡылым, уларҙың яһалышы, мәғәнәләре, төрҙәре, үҙенсәлектәре. Хәл ҡылымдар процестың билдәһен белдереүҙәре менән рәүештәргә оҡшай, ә уларҙың барлыҡ-юҡлыҡ, күләм, йүнәлеш ялғауҙары ҡабул итеүе - ҡылымлыҡ билдәләре. Хәл ҡылымдарҙың ҡулланышы һәм дөрөҫ яҙылышы.

Ҡылымдарҙы дөйөмләштереп кабатлау.

**Рәүеш . 3 сәғәт**

Рәүеш төркөмсәләре: төп рәүештәр, ваҡыт рәүештәре, урын рәүештәре, оҡшатыу-сағыштырыу рәүештәре, күләм-дәрәжә рәүештәре, сәбәп-максат рәүештәре тураһында төшөнсә.
Рәүештәрҙең яһалышы: тамыр, яһалма, ҡушма рәүештәр. Дәрәжәләре. Рәүештәрҙең телмәрҙә ҡулланылышы.

**Теркәүестәр. 3 сәғәт**

Теркәүес һүҙәр: парлы һәм яңғыҙ теркәүес һүҙәр.
Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.

**Бәйләүестәр. 2 сәғәт**

Уларҙың эйәреүсе киҫәк менән эйәртеүсе киҫәкте, эйәрсән һөйләм менән баш һөйләм араһындағы бәйләнеште барлыҡҡа килтереүе. Бәйләүестәрҙең төркөмсәләре, мәғәнәләре. Уларҙың телмәрҙәге әһәмиәте. Синоним бәйләүестәрҙе ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.

**Киҫәксәләр. 2сәғәт**

Киҫәксәләрҙең төркөмсәләре, уларҙың дөрөҫ яҙылышы, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.
Мөнәсәбәт һүҙәр. Уларҙың һөйләмдә хәбәр булып килеүе, шулай уҡ һөйләмгә төрлө модаллек мәғәнәләрен биреүгәлә хеҙмәт итеүе, дөрөҫ яҙылышы.

**Ымлыҡтар. 1сәғәт**

Уларҙың кешеләрҙең хис-тойғоһон, теләк-ынтылыштарын белдереүе. Ымлыҡ төрҙәре, телмәрҙәге әһәмиәте, дөрөҫ яҙылышы. Ымлыҡтарҙың яңы һүҙәр яһауҙа нигеҙ булыуы.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе. 8 синыф**

**Ябай һөйләм синтаксисы. 15 сәғәт**

7 класта алған белемдәрен тулыландырыу. Синтаксис буйынса белемде киңәйтеү.

**Хәл төрҙәре. – 5 сәғәт.**

Сәбәп хәле. Күләм-дәрәжә хәле. Шарт хәле. Кире хәл

**Тиң киҫәкле һөйләмдәр. – 4 сәғәт.**

**Ике һәм бер составлы һөйләмдәр– 10сәғәт.**

Ике һәм бер составлы һөйләмдәрҙе айырырға өйрәнеү.

**9 класс**

**Фонетика,үтелгәндәрҙе ҡабатлау.- 3 сәғәт**

**Морфология буйынса үтелгәнде ҡабатлау. 10 сәғәт**

**Ҡушма һөйләм синтаксисы**. **20 сәғәт** Ҡушма һөйләм төрҙәре. Теҙмә ҡушма һөйләм. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм.

Эйәртеүле ҡушма һөйләм. Эйәрсән һәм баш һөйләм. Эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә бәйләүсе саралар.Тыныш билдәләре. Эйәрсән һөйләм төрҙәре.Эйә һөйләм.Хәбәр эйәрсән һөйләм. Аныҡлаусы, тултырыусы һөйләмдәр. Рәүеш, сәбәп, маҡсат эйәрсән һөйләмдәр. Күләм –дәрәжә, шарт, кире эйәрсән һөйләмдәр.

Күп эйәрсәнле һәм ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр. Теҙемдәр.Ҡушма һөйләм буйынса үтелгәнде ҡабатлау.Тыныш билдәләре.

**“Башҡорт теле ” фәненең төп йөкмәткеһе буйынса тематик план**

| **№** | **Уҡыу курсының бүлектәре** | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | **7** | **8** | **9** |
| 1 | Фонетика, орфоэпия, графика | 4 | - | 3 |
| 2 | Лексика | - | - | - |
| 3 | Морфология һәм орфография | 28 | - | 10 |
| 4 | Синтаксис һәм пунктуация | - | 32 | 18 |
| 5 | Белем кимәлен диагностикалау, ағымдағы һәм йомғаҡлау контроле, яҙма эштәр | 2 | 2 | 2 |